# ЙӘШЕН УЙНАТКАН КӘЛӘМ





*Әҙәбиәткә 60-сы йылдар башында килгән беҙҙең быуын китапка, сәнғәткә табынып үҫте. Бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышында катнашкан һалдат-шағирҙарға, һалдат-яҙыусыларға һокланды, әҫәрҙәрен күтәреп алып, һәр уңайлы осракта хуплау һүҙе әйтергә тырышты. Ә бына ижад донъяһына һуңырак аяк баҫкан быуынға һағырак, хатта бер аҙ ғына «өҫтәнерәк» караны, хурламаһа ла, артык хуплап барманы. Әҙәбиәткә быуат аҙағында килгән бөгөнгө әҙиптәр беҙгә лә шулайырак карай. Хатта арттырыбырак ебәрәләр. Хәйер, был ғәҙәти күренеш, тәбиғи бер тойғолор. Беҙ бит оло быуынды хөрмәтләргә, изге итеп күрергә өйрәнгән. Ошо тойғо-ғәҙәт канға һеңгән. Өлкән кәләмдәштәр үҙ ижадтарына һаман бары хуплау, мактау һүҙе көтә. Кирәкһе һирәк була...*

*Дөрөҫ, ғәҙәти булмаған хәлдәр ҙә осрай ине. Сөнки, донъя киңлек, йәш кәләм эйәләре лә бер генә калыпка һыйып, бер генә кағиҙәгә буйһоноп бармай. Ҙур талант үҙе үк ғәҙәти булмаған бер күренеш, оҙак, хатта мәңге асылыр серле йомғак бит ул.*

*Бөтә быуын ижад кешеләре күңелендә бер юлы танылыу һәм хуплау тапкан һүҙ оҫтаһы — Ауырғазы районының Төрөмбәт ауылында тыуып-үҫкән егет — Рәшит Назаров ана шундай исем, ана шундай ҙур талант булды. Тәүге әҫәрҙәре баҫылып сығыу менән йәшәп килгән традицияларҙы, йола буйынса мактаусыларҙы, ғәҙәт буйынса ғына тәнкитләүселәрҙе боҙҙо булһа кәрәк. Олоһо ла, кесеһе лә уны тиҙ күреп алды: һокланды, ғәжәпләнде, таң калды. Сөнки башкаса мөмкин түгел ине. Йәш шағир башкорт әҙәбиәтенә яңы һүҙ, яңы сер алып килде...*

*Рәшит Назаровтың ике ҙур томлығы әҙерләнде, якын йылдарҙа улар донъя күрер тип өмөтләнәбеҙ.*

*Рәшит Назаровтың ижад мөғжизәһен асыу — алда, яңы быуатта!*

*Риф Мифтахов.*

*Рәшит НАЗАРОВ*

## Тыуған тел

Миңәме ни һине оноторға!
Тыуған телем, әсәм һөтөләй,
Сафлыҡ бирҙең миңә,
                    ҡеүәт бирҙең,
Ҡуша үҫтең йөрәк итемә.

Әйҙә юлдар алыҫ алып китһен,
Мин барыбер тыуған илемдә.
Тыуған илгә булған һөйөүемде
Әйтермен тик тыуған телемдә.
1.12.1963.

* * *

Уң ялы — аҡ, һулы — ҡара,
Ваҡыт — толпар сабып бара.
Ҡапыл елеп үтеп китә,
Ташты ҡамыр итеп китә...

Кем йөрәген арбамаҫ ат,
Тик, йоҡлама, шуға ла баҡ:
Хаҡ ир эйәр һалыр уға,
Иҫәүәнде иҙер тояҡ.
31.12.1963.



05-2001.p65 117 27.07.01, 12:17

## Вулкан

Йөрәгем, бәлки, Ергә оҡшаштыр,
Самалап сәскә, күберәк таштыр,
Йәйе лә барҙыр, барҙыр ҡышы ла,
Осалыр унда ел дә, ҡошо ла,
Сүлдәр дөрләйҙер,
ҡотоп дыулайҙыр,
Донъя бит, донъя —
шунһыҙ булмайҙыр.

Ҡырыҫтыр минең йөрәгем, Ерҙәй,
Ул да һис ниҙе буш ҡына бирмәй.
Ап-аҡ түгелдер йөрәк тә, Ерҙәй —
Тик ҡара ерҙән аҡ гөл бит үрләй.
Һалҡындыр минең йөрәгем,
Ерҙәй —
Ләкин эсендә ут бит, ут дөрләй.

Ут дөрләй унда ажарлы, тере,
Юл эҙләп сапсый ул ары-бире...
Ҡапыл уҡ атһа уға наҙлы күҙ,
Ҡылыстай ярһа ҡапыл үсал һүҙ,
Йәки хистәргә тулышһа артыҡ —
Суйыр таштарҙы, тауҙарҙы ватып
Урғып сыға ут! Үкерә вулкан!
Ирейҙәр утта ҡыш, йәй, көн,
төн, таң!

Тик ул да бер саҡ
тына бит...
Вулкан ғына бит, вулкан ғына бит!

9.02.1966.

## Юk!

Һәм мин ятам бына... Арығанмын.
Арығанмын юлдан, шау-шыуҙан.
Арығанмын эштән, эшһеҙлектән,
Буш тынлыҡтан, сая ярһыуҙан...

Күҙ алдымда һалҡын
зәңгәр көмбәҙ,
Һаман алыҫ, һаман мөһабәт...
Хыялдарым хәҙер уны йыртмай,
Тынысланды күк тә ниһайәт!

Йондоҙҙарҙың боҙмаҫ тынысլығын
Йөрәгем дә инде бөгөндән.
Ергә ҡолап төшкән йәш ай кеүек,
Йәш ай кеүек ул да бөгөлгән...

Ҡулдар хәлһеҙ, ҡулдар ерҙе ҡосмай,
Иренемә ҡыҫмай күтәреп.
Хужаһыҙ буш бөркөт ояһылай
Тын һәм һалҡын бөгөн күкрәгем.

Мәңгелеккә сикһеҙлекте ҡушып
Хәмер ҡоймаҡ инем шундай бай.
Шул хәмерҙе һалып, һуҙмаҡ инем
Йөрәгемде ғәжәп бокалдай...

Һәм мин ятам бына...
тынлыҡ, тынлыҡ...
Ерҙә минең дуҫтар бар ине...
Юлдарыбыҙ ғорур ҡая, тауҙар,
Ҡырыҫ, уйсан, алыҫ яр ине.

Тормош минең дуҫым булғанғалыр,
Күберәк ине бугай дошманым...
Ҡулда ҡылыс ине, өҫтөмдә күк,
Бошманым мин, юҡ,
юҡ, бошманым...

Тынлыҡ, тынлыҡ, тынлыҡ...
Арығанмын...
Талпына тик алыҫ шом ғына.
Күкрәгемә, көнгә йылынырға,
Шыуып сыға йылан шым ғына...

Бөгәрләнеп ята хужа кеүек,
Ҡупшы һынын көндә уйната...
Сеү... ҡанымды өтә һалҡынлығы,
Йөрәгемде тыны уята...

Тағы тибә йөрәк! Һиҫкәнгәндәй
Ерем китә ҡапыл тетрәнеп.
Алыҫ йәшен күкте ярып уҙа,
Дөрләп китә һалҡын күкрәгем.

Ояһына ҡабат ҡайта бөркөт,
Һауа ярҙы ғорур бер тауыш.
Баҫты йөрәк, гүйә, дошманына
Һикерергә торған юлбарыҫ.

Башын һуҙып, тертләп,
йылан шул саҡ
Ыҫылданы, ситкә һикерҙе...
Мин сайҡалып ергә тороп баҫтым...
Юҡ! Мин үлмәнем әле, мин тере!

25-26.02.1966.

